***Мәулит ЯМАЛЕТДИН***

# “Ҡуңыр буға” балҡышы

Бына, йөрәкһенеп көткән, илһамланып ҡаршылаған Әҙәбиәт йылы ла артта ҡалды. Был йылды лайыҡлы итеп уҙғарыу буйынса Башҡортостан Яҙыусылар союзы ла, Мәҙәниәт министрлығы ла, республика китапханалары ла, ижади интеллигенция ла ҡулдарынан килгәндең бөтәһен дә эшләргә тырышты. Күмәк көс менән республика күләмендә үткәрелгән “Әҙәби нағыш” марафонын ғына алайыҡ. Уның һөҙөмтәһендә республикабыҙҙа күпме йәш таланттар асылды, күпмеһе үҙҙәре өсөн файҙалы булған кәңәштәр ишетте, ҡулъяҙмаларына ҡарата хаҡлы баһалар алды. “Әҙәби нағыш” республика марафоны һөҙөмтәләре шуныһы менән әһәмиәтле: улар әҙәбиәтебеҙҙең киләсәгенә өмөт менән бағырға ярҙам итте, рухи потенциалыбыҙҙың һайығаймауына ышаныс уятты. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының йәштәргә йөҙ бороуы, әҙәби алмаш әҙерләүгә иғтибарҙы арттырыуы ҡыуаныслы күренештәрҙең береһе, әлбиттә.

Башҡортостан Яҙыусылар союзының терәк пункты булараҡ ойошторолған “Ҡуңыр буға” төбәк йәмәғәт ойошмаһы 2015 йылда ла көсөргәнешле эшмәкәрлек алып барҙы. Билдәле булыуынса, һәр ижади ойошманың, берләшмәнең иң тәүге һәм төп бурысы — ҡулъяҙмалар менән эшләү. Әгәр ойошманың көн тәртибендә ул эш юҡ икән, ниндәй генә яңғырауыҡлы һүҙҙәр

*«Ҡуңыр буға» ойошмаһының Учалы районы Сәфәр ауылында үткәрелгән күсмә семинарында ҡатнашыусылар. 2015 йыл*



һөйләмә, ниндәй генә шау-шыулы саралар ойошторма — бөтәһе лә бушҡа ғына. Ошо йәһәттән ҡарағанда, “Урал аръяғы ижади көстәренең “Ҡуңыр буға” берләшмәһе” төбәк йәмәғәт ойошмаһы 2015 йыл һуҙымында бик күп эш башҡарҙы. Йыл дауамында беҙгә йәмғеһе 81 ҡульяҙма ингән. Әйтергә кәрәк, был бик ҙур күрһәткес. Иң күп ҡульяҙма Әбйәлил ижадсыларыныҡы — бөтәһе 46 автор. Белорет районынан 16, Учалынан 14, Магнитогорск ҡалаһынан 4, Күгәрсен районынан 1 ҡульяҙма алынған. Ҡульяҙмаларҙың абсолют күпселеге шиғыр — барлығы 710. Уларҙан тыш, 22 хикәйә, 1 поэма ҡабул итеп алынған. Улар араһынан 107 шиғыр, 16 хикәйә “Ағиҙел” журналына, 1 поэма “Ватандаш”ҡа тәҡдим ителгән. Әбйәлил районының Асҡар ауылында уҙғарылған йәш ижадсылар конференцияһына 141 шиғыр тикшереүгә ҡуйылған, “Әҙәби нағыш” республика марафонында тикшереүгә 250 шиғыр, 1 повесть сығарылған. Уларҙан тыш, 285 шиғыр һәм 16 хикәйә төрлө китаптарға әҙерләп бирелгән, йәштәрҙең 50 шиғыры “Әҙәби нағыш” антологияһына тәҡдим ителгән, 16 шиғыр республика гәзиттәренә әҙерләп бирелгән.

Яңы исемдәр асыу, йәш таланттарҙы эҙләү һәм әҙәбиәткә ылыҡтырыу — беҙҙең ойошма эшмәкәрлегенең даими иғтибар үҙәгендә. Ошо маҡсаттан сығып, төрлө райондарҙа конференциялар, күсмә семинарҙар уҙғарыу матур традицияға әүерелгән. Мәҫәлән, 2015 йылдың апрелендә Әбйәлил районының Асҡар ауылында йәш ижадсыларҙың зона конференцияһы үткәрелде. Унда Марсель Дәүләткирәевтың проза әҫәрҙәре, Гөлшат Дәүләтшинаның, Эльмира Әхмәҙинаның (уҡыусы), Динара Ғәлләмованың (уҡыусы), Нәркәс Ҡәйепҡолованың (уҡыусы), Лилиә Солтанованың (уҡыусы) шиғырҙары тикшерелде. Уның һөҙөмтәләре буйынса, шиғырҙары яҡшы баһаға лайыҡ булған Эльмира Әхмәҙинаның, Динара Ғәлләмованың, Лилиә Солтанованың шиғырҙары “Тыуған яҡ биҙәктәре” тигән дөйөм китапта нәшер ителде (Өфө, “Деловая династия”).

15 майҙа Белорет ҡалаһында уҙғарылған күсмә семинарҙа Наилә Ҡималованың (Инйәр ҡасабаһы), Лира Хәйруллинаның (Шығай ауылы), Нәркәс Йомағужинаның (Үткәл ауылы) шиғырҙары тикшереүгә ҡуйылды. Уларҙың башланғыс ижадтары дөйөм алғанда ыңғай баһаланып, үҙнәшер юлы менән баҫтырырға тәҡдим ителде. Әйткәндәй, һуңғы ике авторҙың ҡульяҙмалары “Әҙәби нағыш” марафонында тикшерелеп, арыу ғына баһа алды һәр уларҙың бер нисә шиғыры “Әҙәби нағыш” антологияһына инде. Республика буйынса уҙғарылған “Әҙәби нағыш” марафонына ойошманан 10 йәш ижадсының ҡульяҙмалары сығарылды — Учалынан Светлана менән Урания Вәхитовалар, Лидия Ғайсина, Динара Батыршина, Белореттан Нәркәс Йомағужина, Лира Хәйруллина, Гөлкәй Шиһапова, Әбйәлилдән Лилиә Солтанова, Динара Ғәлләмова, Нәркәс Ҡәйепҡолова. Был 10 йәш ижадсының дүртеһе мәктәп йәшендәге уҡыусы балалар булыуы бигерәк тә һөйөнөслө, сөнки бөгөнгө көндә Башҡортостан Яҙыусылар союзында ағза булып торған әҙиптәрҙең уртаса йәше 60 менән 70 араһында тирбәлә. Марафон һөҙөмтәләре лә беҙҙең өсөн ҡыуаныслы: Светлана менән Уранияның ҡульяҙмалары Башҡортостан “Китап” нәшриәтенә тәҡдим ителде, Н.Йомағужинаның, Л.Хәйруллинаның, Л.Солтанованың, Д.Батыршинаның, Д.Ғәлләмованың шиғырҙары “Әҙәби нағыш” антологияһына инде.

Ҡулъяҙмалар менән эш беҙҙең тарафтан туҡтатылғаны юҡ — ул даими һәм планлы рәүештә алып барылған төп хәстәрлегебеҙ. “Әҙәби нағыш” марафонынан аҙаҡ, 10 октябрҙә Белорет районының Сосновка ауылы китапханаһында уҙғарылған күсмә семинарҙа Әбйәлил ҡыҙы Гөлфирә Вәлиева менән Межгорье ҡалаһында йәшәүсе Айгөл Муллағәләмованың шиғырҙары тикшерелеп, уларҙың ҡулъяҙмалары Башҡортостан Яҙыусылар союзының поэзия секцияһына тәҡдим ителде. Бынан һуң, 29 октябрҙә Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылында үткәрелгән күсмә семинарҙа Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл ҡасабаһында йәшәүсе Рәйлә Хисмәтуллинаның ҡулъяҙмаһы тикшерелде һәм уға байтаҡ файҙалы кәңәштәр әйтелде.

Ҡулъяҙмалар тикшереүҙе төп маҡсат итеп ҡуйған семинарҙарға һәм конференцияларға шулай ҙур иғтибар биреү аңлашылалыр. Унда йәш һәм башлап яҙыусы ижадсыларға төрлө кәңәштәр әйтеүҙән тыш, ойошма ағзалары бер-береһе менән аралаша. Ә йәнле аралашыуға ни етһен? Беренсенән, унда ҡулъяҙмалар тикшереү барышында йәштәр үҙҙәре өсөн күп файҙалы фекерҙәр ишетә. Икенсенән, әлеге семинарҙарҙа ҡатнашыусы икенселәре фәһем ала. Өсөнсөнән, шиғырҙарға, хикәйәләргә анализ яһаусылар ҙа үҙҙәре өсөн күп яңылыҡтар аса, башҡаларҙың күҙгә күренеп торған етешһеҙлектәренән арынырға өйрәнә. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙҙең “Ҡуңыр буға” — үҙенсәлекле ижади лаборатория ла.

Әҙәби процесс, ҡайһы берәүҙәр күҙ алдына килтергәнсә, шау-шыуға ҡоролған мәҙәни сара түгел. Шулай ҙа, әҙәбиәтте пропагандалау ҙа кәрәкле эш. Бигерәк тә бөгөнгө көндә, халыҡтың (бигерәк тә йәштәрҙең) китап уҡыуға әүәҫлеге кәмегән осорҙа, пропаганда эшенең әһәмиәте бермә-бер арта. Шул юҫыҡтан ҡарағанда, 2015 йылда ла беҙҙең ойошма әҙәбиәтте халыҡҡа таратыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарҙы. Мәктәптәрҙә уҡыусылар менән осрашыуҙар йыш ойошторола. Мәҫәлән, Учалы районының Озерный мәктәбе, Сәфәр урта мәктәбе (ике тапҡыр), Комсомольск урта мәктәбе, Бәләкәй Ҡаҙаҡкүл төп белем биреү мәктәбе. Ындай саралар Әбйәлил районы биләмәләрендә лә күп кенә уҙғарылған: Күсем ауылында, Ишҡол урта мәктәбендә, Буранғол ауылы китапханаһында, Ташбулат урта мәктәбендә, Ҡырҙас урта мәктәбендә, Урал урта мәктәбендә, Таштуй төп белем биреү мәктәбендә, Байым урта мәктәбендә. Шулай уҡ, әҙәбиәтте пропагандалауға йүнәлтелгән осрашыуҙар Бөрйән районында, Белорет районында, Магнитогорск ҡалаһында ла үткәрелгән. Ошондай осрашыуҙарҙа ойошманың төп көстәрен тәшкил иткән Мөхәррәм Сәлимов, Хәҙис Ниғмәтуллин, Фәнүзә Биктимерова, Зөһрә Ҡашапова, Мәҙинә Йәғәфәрова, Айһылыу Хәсәнова, Зөлфирә Ҡарағужина, Мәрйәм Сәлмәнова, Филүрә Моратшина, Рәмзилә Ҡәлимова, Мәүлит Ҡәримов, Сәғирә Шәрәфетдинова, Фаиза Мәғәсүмова, Иҙрис Ноғманов, Зөһрә Усманова, Радик Өмөтҡужин, Фатима Һибәтова, Мөнир Иҡсанов, Светлана Вәхитоваларҙың әүҙем ҡатнашыуын билдәләп үтке килә. Уларға оло рәхмәттән башҡа әйтер һүҙ юҡ. Ә уйлап ҡараһаң, үҙебеҙҙең ижад емештәрен үҙебеҙ пропагандаламаһаҡ, кем пропагандалар?

Ойошма ағзалары тарафынан нәшер ителгән китаптарҙың исем туйҙарын уҙғарыуҙы ла шул әҙәбиәтте пропагандалау сараларына индерергә булалыр. Берҙән, был ижадсыларыбыҙҙы өлгәшкән уңыштары менән ҡотлау,

авторҙарҙың ҡыуаныстарын уртаҡлашыу булһа, икенсенән, әлеге китаптар менән йыйылған халыҡты таныштырыу төп маҡсаттарҙың береһе булып тора. 2015 йылда “Ҡуңыр буға” төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының 9 китабы донъя күргән: Хәким Алсынбаевтың “Күңел дәфтәре” (“Китап” нәшриәтендә), Фәриха Вәлиуллинаның “Ҡурайлы сағыл” (Сибай ҡала типографияһында), Мәргән Хөсәйеновтың “Облако надежды” (Учалы ҡала типографияһында), Хәбил Хажиндың “Һоҡланам матурлыҡҡа” (Учалы ҡала типографияһында), Мәүлит Ямалетдиндың “Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма” (“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми-нәшриәт комплексында), Хәҙис Ниғмәтуллиндың “Юлға сығам” (Учалы ҡала типографияһында), Әлфиә Әбдрәфиҡованың “Күңелем серҙәре” (Сибай ҡала типографияһында), Сания Мортазинаның “Рәхмәт һиңә, яҙмышым” (“Китап” нәшриәтендә), Иҙрис Ноғмановтың “Ике ут араһында” (Сибай ҡала типографияһында). Был китаптарҙың күбеһенең исем туйҙарын уҙғарыу, моғайын, уларҙың авторҙарына дәрт биргәндер, ижадта яңынан-яңы уңыштар яулау теләге уятҡандыр. Һәр хәлдә, быға ышанғы килә.

Исем туйы тигәндән, 2015 йылда иң күп презентацияланған китап “Ҡуңыр буға” балҡышы” антологияһы булды. Ул Белорет районының Сосновка ауыл китапханаһында, Учалы ҡалаһының балалар китапханаһында, Әбйәлил районының Ҡырҙас ауыл мәҙәниәт йортонда, Байым урта мәктәбендә, Магнитогорск башҡорт-татар китапханаһында үткәрелде. Был аңлашыла, сөнки әлеге китапҡа ойошма ағзаларының иң яҡшы шиғырҙары менән хикәйәләре тупланды һәм ул әҙәбиәт һөйөүселәргә авторҙар тарафынан үҙенсәлекле бүләк булды. Был йыйынтыҡты баҫтырып сығарыуҙы тулыһынса үҙ өҫтәренә алған ҡырҡ авторҙың барыһына ла оло рәхмәт әйтеп, уларға ижади бейеклектәр теләйһе генә ҡала.

Коллектив йыйынтыҡтарҙың ҡалғандарына килгәндә иһә, улар Әбйәлил һәм Учалы районы мәктәптәрендәге уҡыусы балаларҙың тәүге ижад емештәренән ғибәрәт. Эш шунда: өсөнсө йыл рәттән беҙҙең ойошма, урындарҙағы мәғариф бүлектәре менән берлектә, “Минең беренсе китабым” исемле ижади конкурс үткәреп килә. Уның положениеһына ярашлы, конкурста еңеүсе балаларҙың иң яҡшы шиғырҙары һәм хикәйәләре айырым китап булараҡ нәшер ителеп, йәш авторҙарҙың үҙҙәренә тапшырыла. Был уларға үҙенсәлекле стимул, дәртләндереү сараһы. 2013—2014 уҡыу йылында уҙғарылған конкурс йомғаҡтары буйынса Учалы районы мәктәптәрендәге 4 уҡыусы баланың йыйынтығы “Юл башы” тип аталды, Әбйәлил уҡыусыларының ижади эштәре тупланған йыйынтыҡ “Йәйғорсоҡтар” тип исемләнде. 2014—2015 уҡыу йылындағы конкурс йомғаҡтары буйынса Әбйәлил балаларының 17 ижади эшен үҙ эсенә алған китапсыҡ “Йырҙарыбыҙ һиңә, Әбйәлил” тип исемләнһә, Учалы уҡыусыларының 10 ижади эше тупланған йыйынтыҡ “Яҡты эҙҙәр” тип аталды. “Әҙәби нағыш” республика марафоны ваҡытында ике район балаларын да йыйып, тантаналы шарттарҙа китапсыҡтарын ҡулдарына тапшырыу иҫтәлекле һәм күркәм ваҡиғаларҙың береһе булды.

Коллектив йыйынтыҡтарҙың икенсеһенә килгәндә, ул апрель айында Аҫҡарҙа уҙғарылған йәш ҡәләм тибрәтеүселәр конференцияһында ижадтары ыңғай баһа алған Лилиә Солтанова, Динара Ғәлләмова һәм Эльмира

Әхмәҙиналарҙың шиғырҙарынан төҙөлгән “Тыуған яҡ биҙәктәре” китабы. Өфөләге “Деловая династия” нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан был китаптың донъя күреүе өсөн беҙ атаҡлы ғалимыбыҙ, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының директоры Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдиноваға ҙур рәхмәтлебеҙ. Дөйөм алғанда, коллектив йыйынтыҡтарҙа 30 уҡыусы баланың һәм 40 оло ижадсыбыҙҙың әҫәрҙәре донъя күргән.

Әлбиттә, беҙҙең эҙмә-эҙлекле һәм системалы эшмәкәрлегебеҙ һөҙөмтәһендә әҙәби ижадҡа ылыҡтырылған ул йәштәрҙең барыһы ла яҙыусы йәиһә шағир булып та китмәҫ. Әммә шуны ышаныслы рәүештә әйтә алабыҙ: ҡәләм тибрәтеүсе был ҡыҙҙар һәм малайҙар киләсәктә телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә, ғөмүмән, рухиәтебеҙгә мәңгелек һөйөү йөрөтәсәк һәм ул һөйөүҙе үҙҙәренең балаларына һеңдерәсәк.

Заманында республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә бер-бер артлы төҙөлгән яҙыусылар ойошмаларының, донъяла һәм илебеҙҙә барған финанс көрсөгө һөҙөмтәһендә, шулай уҡ береһе артынан икенсеһе ябыла башлаған осорҙа Урал аръяғындағы рухи үҙәк булараҡ уйланылған һәм ойошторолған “Ҡуңыр буға” төбәк йәмәғәт ойошмаһы региондағы мәҙәни сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, 2014 йылда беҙҙең инициатива менән уҙғарылған киң күләм мәҙәни сараларҙан мәшһүр йыраусы һәм актриса Бибикамал Мәһәҙиева призына башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың зона конкурсын (Аҫҡар ауылы), Белорет районының Шығай ауылында атаҡлы ҡурайсы һәм көйсө Абдулла Хәлфетдинов призына һәүәҫкәр композиторҙарҙың зона конкурс-фестивален, Учалы районында мәшһүр ҡурайсылар Ислам Моратов менән Лоҡман Ҡәлимуллиндар призына район-ҡала ҡурайсылар конкурсын атап китергә була. Был саралар шуныһы менән бигерәк тә әһәмиәтле: уларҙа, ололар менән бер рәттән, уҡыусы балалар ҙа күпләп ҡатнаша. Мәҫәлән, Әбйәлил районындағы йырсылар конкурсында ҡатнашҡан 40 йыраусының ун икеһе йәш башҡарыусылар булды. Ә Учалылағы ҡурайсылар конкурсындағы утыҙҙан ашыу конкурсанттың ун алтыһы музыка мәктәптәрендә белем алған балалар ине. Был сараларҙың барыһы ла урындарҙағы хакимиәт башлыҡтарының изге фатихаһы һәм мәҙәниәт, мәғариф бүлектәренең һәр яҡшы башланғысты күтәрмәләп тороуҙары арҡаһында юғары кимәлдә уҙа. Бының өсөн беҙ Белорет, Әбйәлил, Учалы райондарының хакимиәт органдарына, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә ҙур рәхмәтлебеҙ.

2015 йылда ла “Ҡуңыр буға” төбәк йәмәғәт ойошмаһы тарафынан мәҙәни саралар байтаҡ үткәрелде. Уларҙың иң эреләрен генә һанап китәйек: Белорет районы Сосновка ауыл китапханаһында Талип Латиповтың хәтер кисәһе; шул уҡ райондың Шығай ауыл мәҙәниәт йортонда Абдулла Хәлфетдинов призына һәүәҫкәр композиторҙарҙың “Алтын ҡәмәр” исемле 2-се төбәк-ара конкурс-фестивале; Белорет ҡалаһында композитор Мөхәррәм Сәлимовтың 80 йәшенә ҡарата уның призына юбилярҙың йырҙарын башҡарыусы уҡыусы балалар араһында зона конкурсы; Учалы ҡалаһының “Турист” балалар һәм үҫмерҙәр клубында Талха Ғиниәтуллиндың тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата уның ижады буйынса 3 номинацияла фәнни конференция; Учалы районының Озер-

ный урта мәктәбендә Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата уҡытыусылар араһында шиғыр һөйләүселәрҙең төбәк конкурсы; БДУ-ның Учалы вәкиллегендә “XXI быуатта кешене рухи һәм физик яҡтан сәләмәтләндереү” ғилми-ғәмәли конференцияһы; Учалы ҡалаһындағы Зәйнулла Рәсүлев исемендәге мәсеттә балалар араһында Ҡөрьән сүрәләрен яттан һөйләү буйынса ҡала-район конкурсы. Күреүегеҙсә, быйылғы сараларҙың да ҡатнашыусылары — уҡыусы балалар. Улар араһынан Мөхәррәм Сәлимов призына уҙғарылған конкурста ҡатнашҡан балаларҙың географияһын һәм конкурсанттарҙың һанын айырым билдәләп китергә кәрәк. Унда Белорет районы һәм ҡалаһы, Учалы районы, Бөрйән районы мәктәптәренән барлығы 102 уҡыусы бала ҡатнашты. Учалы районында Ҡөрьән сүрәләрен яттан һөйләү конкурсында ҡатнашыусылар һаны ла иғтибарға лайыҡ — унда йәмғеһе 9 команда ҡатнашып, уҡыусыларҙың дөйөм һаны һикһәндән ашыу булды.

Һәр яҙыусының ижади активлығы уның ваҡытлы матбуғат биттәрендә донъя күргән әҫәрҙәре менән дә баһалана. Шул яҡтан ҡарағанда, ойошма ағзалары был өлкәлә лә өлгөрлөк күрһәткән, тип әйтә алабыҙ. Бер йыл эсендә авторҙарыбыҙҙың әҫәрҙәре республика журналдарында 10 тапҡыр донъя күргән: Айһылыу Хәсәнова — “Ватандаш”, Мәүлит Ямалетдинов — “Ағиҙел”, “Ватандаш”, “Минги-тау”, “Бельские просторы”, Бибикамал Шәйҙуллина — “Бельские просторы”, Светлана Вәхитова — “Шоңҡар”, Мәҙинә Йәғәфәрова — “Башҡортостан ҡыҙы”, Айгөл Муллағәләмова — “Башҡортостан ҡыҙы”, Наилә Ҡималова — “Башҡортостан ҡыҙы” журналында. Бынан тыш, 22 авторҙың шиғырҙары һәм 8 авторҙың хикәйәләре “Ағиҙел” журналында баҫылған.

Йыйып әйткәндә, Рәсәй Федерацияһы күләмендә махсус иғлан ителгән Әҙәбиәт йылында “Ҡуңыр буға” төбәк йәмғәт ойошмаһы тарафынан башҡорт әҙәбиәтенә алмаш әҙерләү, ижади көстәрҙе бергә туплау, әҙәбиәтте, сәнғәтте пропагандалау буйынса хәтһеҙ эштәр атҡарылған. Беҙҙең эҙмә-эҙлекле һәм планлы рәүештә алып барған эшмәкәрлегебеҙ төбәк яҙыусыларында сәләмәт сәм һәм дәрт уятты, уларҙың ижадына яңы импульс бирҙе. Ошо ҙур һәм изге эштәрҙе атҡарыуҙа райондарҙа йәшәп ижад итергә көс һәм ваҡыт тапҡан ҡәләмдәштәргә рәхмәттең иң олоһо. Бер нәмәгә ҡарамайынса, ойошма эшмәкәрлегендә ҡайнап, үҙҙәренең эскерһеҙ ярҙамдарын күрһәткән, тәжрибәләре менән уртаҡлашҡан ижадсыларҙы атап китмәһәм, хилаф булыр ине. Белореттан Мәүлит Ҡәримов, Әнисә Аҫылғужина, Сәғирә Шәрәфетдинова, Мөхәррәм Сәлимов, Зилә Абзалова, Әбйәлилдән Хәҙис Ниғмәтуллин, Айһылыу Хәсәнова, Фәнүзә Биктимерова, Зөһрә Ҡашапова, Мәҙинә Йәғәфәрова, Мәрйәм Сәлмәнова, Зөлфирә Ҡарағужина, Иҙрис Ноғманов, Радик Өмөтҡужин, Зөһрә Усманова, Филүрә Моратшина, Фатима Һибәтова, Учалынан Рәмзилә Ҡәлимова, Светлана Вәхитова, Мөнир Иҡсанов әҙәбиәттең үҫеше өсөн арымай-талмай, көстәренән килгән хәтле хеҙмәт итеүсе ана шундай ағзаларыбыҙ. Иң мөһиме, беҙҙең сафтар тулылана бара. Тимәк, беҙ дөрөҫ һәм ышаныслы юлдабыҙ. Киләсәктә лә Башҡортостан Яҙыусылар союзының ышаныслы терәге — “Ҡуңыр буға” ойошмаһы ағзаларына — халҡыбыҙға рухи йыуаныс булырҙай талантлы әҫәрҙәр ижад итергә яҙһын.